*Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ*

# Хайран эштәре ҡала



## Иглинда, Шаҡшала

Байтаҡ йылдар күҙ уңына алынмағандан һуң, ниһайәт, ауыл хужалығын тергеҙеүгә һәм үҫтереүгә иғтибар ителә, был өлкәлә милли проект ғәмәлгә ашырыла башланы. Малсылыҡ, умартасылыҡ, йәшелсәселек менән шөғөлләнеүселәр, айырыуса шәхси хужалыҡтар ишәйә. Был — һөйөнөслө хәл. Бит ауыл хужалығы — көнитмештең, аҙыҡ-түлек етештереүҙең төп сығанағы, игенселек һәм малсылыҡтың мөһим тармағы.

Башҡортостаныбыҙҙа бәғзе эшҡыуарҙар ҙа иҡтисадтың ҙур көс, көсөргәнеш һәм сығымдар талап иткән был тармағы менән ихлас шөғөлләнә. Уларҙан уңыш ҡаҙанғаны, ватандаштарының, ҡәрҙәштәренең дә мәнфәғәтен, киләсәген ҡайғыртыусы ”Трал” муниципаль-унитар предприятиеһының генераль директоры, башҡортомдоң яңы башҡорто Риф Шәрифрахман улы Иҫәнов һәм был эштә уға булышлыҡ иткән улдары Рөстәм, Рәфис, Айҙар вә башҡа арҡадаштары булыр. Үҙ шөғөлдәрен яраткан, мөкиббән башҡарған эшһөйәр һәм ғәйри ир-егеттәр.

Билдәле эшҡыуарҙың хужалығын, эште нисек алып барыуын үҙ күҙҙәребеҙ менән күрергә тәүҙә Иглин еренә, шунан Ишембайға юлландыҡ. Иглинда Надеждино ауылында беҙҙе хужалыҡ эштәренә ида-

ра итеүсе Фаил Хәбиров, малсылыҡ комплексы етәксеһе Светлана Юшкевич ҡаршы алды. Светлана Александровнаның һөйләүенсә, бер быуат элек Башҡорт иленә башҡа халыҡтар менән бергә белорустар ҙа күсеп килгән. Тарихҡа баҡһаҡ, Столыпиндың аграр реформаһы Рәсәйҙең агросәйәсәт курсында боролош яһарға ниәтләп, крәҫтиәндәргә крәҫтиән общинаһынан хуторҙарға, отрубтарға сығырға, ер бүлеп бирергә, Себер, Алыҫ Көнсығыш тарафтарына даими йәшәргә күсеп китергә рөхсәт бирә, бының өсөн шарттар тыуҙыра. Крәҫтиәндәрҙе башҡа яҡтарға, төбәктәргә күсереү сәйәсәте, алпауыт ер биләмәләрен һаҡлап ҡалып, аҙ ерлелекте бөтөрөүҙе, ауылдарҙың бүленеүен тиҙләтеүҙе һәм кулактар йөҙөндә батшаның сикләнмәгән хакимлығына өҫтәмә социаль таяныс булдырыуҙы маҡсат итеп ҡуя.

Урманлы, туғайлы, күлле Көҙәй ерендә Светлана Александровнаның ата-бабалары ла йәшәргә урын тапҡан, йорт-торлаҡ ҡорған, ауылды Надеждино тип атаған. Яҡты яҙмышҡа, яҡшы тормошҡа өмөт бағлап, шулай исемләгәндәрҙер, моғайын. Ысынлап та, ғүмер итеү өсөн ҡотло булған был урын. Шуға ла ошонда мәңгегә ереккән белорустар башҡорттар менән татыу, тыныс көн иткән.

Заманында ”Оло Тәләк”, ”Беларусь” совхоздарына ла ҡараған, Өфө моторҙар эшләү производство берекмәһенең ярҙамсы хужалығы ла булған Надеждино. Мал да баҡҡандар, иген дә сәскәндәр. Бүлексәнең һыйыр, һарыҡ, сусҡа, тауыҡ аҫрау ҡуралары, иген һаҡлағыстары, ер эшкәртеү техникаһы, ҡорамалдары бында йәшәүселәрҙе шөғөллө, болло иткән. Колхоздар, совхоздар гранит һымаҡ ныҡ, мәңгелек тойолған. Мәгәр күнеккән йәшәйешебеҙҙе, иҡтисадты, ғөмүмән, ижтимағи ҡоролошто, тормошто үҙгәртеп ҡороу йылдарында Надеждинола ла ғүмер баҡый тапҡан, туплаған — тарҡалған, хужалыҡ ташландыҡ хәлгә төшкән, кешеләр шөғөлһөҙ, яҡлауһыҙ, ярҙамһыҙ тороп ҡалған.

Урыҫмы, белорусмы, башҡортмо, татармы, ниндәй генә милләттән булмаһын, илдә һәр кемдең күңелендә бер теләк: эш урыны, хеҙмәт хаҡы, етеш көнитмеш булһын! Үҙ көнөңдө үҙең күр, кеше ҡайғыһы кештәктә тигән мәлдә, башҡорт эшҡыуары Риф Иҫәнов Надеждиноға ярҙам ҡулы һуҙа, күп көс һалып, аҡса түгеп, бындағы малсылыҡ комплексын тергеҙә, ипкә килтерә. Хәҙер ул әүәлге, ҡәҙимге ферма ғына түгел, ә һәр кәрәк-ярағы бар үҙаллы хужалыҡ. Уның ҡарамағында ике мең гектар самаһы ер (шул иҫәптән күп йыллыҡ үлән, арпа баҫыуҙары, көтөүлектәр, һыулауҙар), өс йөҙ илле баш һыйыр малы, өс ҡура, төрлө маркалы биш трактор, сапҡыстар, сәскестәр, йыйғыстар, техниканы йүнәтеү оҫтаханаһы... Быйыл бында Ишембайҙан тағы етмеш баш һыйыр малы килтерәсәктәр. Мал һаны ишәйә, ферма ҙурая, хәстәрлек арта. Ҡыуаныҫҡа ҡыуаныс: эш, шөғөл бар, һауынсылар, көтөүселәр, тракторсылар, хисапсылар хеҙмәт хаҡы алып тора.

Һыйырҙың һөтө елендә, елендән алда телендә, тиҙәр. Аш булһа, һөт тә, ит тә мул буласаҡ. Был хәҡиҡәтте яҡшы аңлап, мал аҙығын әҙерләү дәррәү бара. Ферма йәнәшендә йомғаҡҡа уралып өйөлгән бесән



эҫкерттәре күҙгә салына. Риф Шәрифрахман улы ҡыуанысы менән уртаҡлаша, бесән әҙерләү торошо менән таныштыра: ”Былтырҙан ҡалған бесән ярты ҡышҡа етерлек. Көндәр йонсоу тороуға ҡарамаҫтан, быйыл да мул ғына мал аҙығы туплауға өлгәштек”. Ул тау һырты һымаҡ һуҙылған эҫкерттәрҙе күрһәтә. Уның әйткәнен раҫлағандай, механизаторҙар төргәк-төргәк бесән ташый, ”Беларусь” тракторы эҫкерткә өйә.

— Бер мең тонна сенаж һалдыҡ, йәнә шул ҡәҙәре һалырға ниәтләйбеҙ, — тип мәғлүмәт биреүҙе дауам итә Фаил Әхәт улы Хәбиров. — Һауын һыйырҙарҙы, көрәйтелгән таналарҙы, буғаларҙы фураж, ҡатнаш аҙыҡ менән дә һыйлайбыҙ. Ашаған малда өмөт, бәрәкәт бар.

Эйе, тап шулай, һыйлы көнөң туҡ һыйырҙа. Әле һәр һыйырҙан көндәлек һауым һигеҙ килограмм тәшкил итә. Һөттө Өфө районындағы шәхси һөт ҡабул итеү компанияһы ҡабул итә, баҙарҙа ла һаталар. Көрәйтелгән малды иһә һуғымға Өфө ит комбинатына тапшыралар. Баҡҡан малдың бәрәкәте, үрсеме бар. Һыйырҙар йыл әйләнәһенә быҙаулап тора. Уларға йәшел бесән дә, фураж оно бешерелеп тә бирелә. Быҙау ҡураһы электр энергияһы менән йылытыла. Ҡураларға яҡындағы һыу ятҡылығынан һыу үткәрелгән, яңы һауыу аппараттары алынған, малсылар махсус эш кейеме менән тәьмин ителгән...

— Риф Шәрифрахман улына бик рәхмәтлебеҙ. Ферманы аяҡҡа баҫтырҙы, уңайлы эш шарттары тыуҙырҙы, егермеләп кешене эш менән тәьмин итте, — тип ҡыуанып һөйләй Светлана Александровна. — Инәйем һауынсы булды. Мин үҙем дә ун һигеҙ йәшемдән — фермала. Үткәнебеҙ, бөгөнгөбөҙ, иртәгәбеҙ ошо ергә бәйле, ризығыбыҙ шунда. Аллаға шөкөр, шөғөлөбөҙ бар, донъябыҙ бөтөн, күңелдәребеҙ көр, кәйефебеҙ яҡшы. Әлбиттә, хужалыҡта етәксе, мал-тыуар өсөн яуаплы кеше булараҡ, мәшәҡәт күп. Әммә эшһеҙ, мәшәҡәтһеҙ көнитмеш юҡ. Эшкә теләп киләм. Сөнки төп хужабыҙ, бағыусыбыҙ Риф Шәрифрахман улы кешелекле, кеселекле, ҡаты итеп һүҙ ысҡындырғаны ла юҡ. Етешһеҙлектәрҙе, кәмселектәрҙе күрә икән, яҡшылап ҡына әйтә, кәңәш-төңәш итә, тәҡдимдәр индерә. Шуға ла уны яҡын күрәләр, хөрмәт итәләр. Бер хәлде лә һөйләп үтәйем. Йыйылыш бара ине. Ниндәйҙер сәбәп менән бер малсы эш хаҡы алмай ҡалыуын әйтте. Риф Шәрифрахман улы мәсьәләне иртәгәһе көнгә ҡалдырмай, кеҫәһенән тейешле аҡсаны сығарҙы ла тотторҙо. Малсы иһә бик ҡәнәғәт булып, хәҙер тағы ла тырышыбыраҡ эшләй.

— Светлана Александровна, ниндәй пландар менән йәшәйһегеҙ? — тим, уй-ниәттәр менән ҡыҙыҡһынып.



— Һөттө һыуытыу ҡоролмаһы ҡуйыу, һауыттарға тултырып һатыу, итте эшкәртеү цехы асыу табышлыраҡ булыр тигән фекерҙәмен. Риф Шәрифрахман улының фатихаһы менән был эштәрҙе лә ғәмәлгә ашырырбыҙ, тип уйлайым.

Риф Шәрифрахман улы яңырыуға, яҡшырыуға, камиллашыуға ҡуш ҡул менән риза, әлбиттә. Мәгәр ул көңөлен борсоған нәмәләрҙе, хеҙмәт күрһәткестәрен күтәрерҙәй тәҡдимдәрен дә әйтмәй ҡалманы:

— Хәҙерге ваҡытта ауыл хужалығында киң даирәлә аҙыҡ-түлек етештереү, ҙур ферма тотоу, мал бағыу еңел түгел. Һалымдар, төрлө түләүҙәр иңгә ҡаты баҫа, тотороҡһоҙ хаҡтар бәкәлгә һуға. Әле малсылыҡ фермабыҙ сауҙа итеү, төҙөлөш иҫәбенә арыу ғына көн күрә. Уның киләсәге малсыларҙың хеҙмәткә мөнәсәбәтенә, аҙыраҡ сығымдар менән үҙкиммәте арзанораҡ продукция етештереүгә бәйле. Мал-тыуарҙы хужаларса бағыу, берәгәйле аҫрау, йәғни күберәк һөт, тосораҡ артым алыу зарур. Халыҡ әйткәнсә, мал көрлөгө — көтөүсенән, мал ырыҫы — бағыусынан.

Социаль хәлгә килгәндә, Надеждино ауылы төҙөкләнә, күркәмләнә. Урамдар — асфальт, мәктәп — зауыҡлы, магазин асыҡ... Риф Иҫәнов Бөйөк Ватан һуғышы яугирҙары иҫтәлегенә обелиск ҡуйҙырған.

Әйткәндәй, республикабыҙҙа Төҙөкләндереү йылында башҡортомдоң яңы башҡорто билен биштән быуып яңы төҙөлөшкә тотонған, Иглинда майҙаны бер мең квадрат метр тәшкил иткән бик күркәм көнкүреш йорто күтәрткән. Подвалында — мунса, сауна, бассейн; тәүге ҡатында — ашхана, ресторан; икенсе ҡатында ҡунаҡхана буласаҡ. Комплекстың директоры Миңлеәхмәт Хәлитовтың әйтеүенсә, үҙ йылытыу ҡаҙаны, ошо урындан урғып сығып ятҡан шишмәләре, фонтаны булған был сихәтле йорт Башҡортостандың Рәсәй дәүләтенә үҙ ирке менән ҡушылыуының 450 йыллыҡ юбилейына файҙаланыуға тапшырыласаҡ.




Ҡыуаныслы хәлдәр байтаҡ. Шаҡша ҡасабаһында Риф Иҫәнов эйә булған, тиҙ арала улдары менән заман талаптарына ярашлы төҙөкләндерелгән

һәм йыһазландырылған ”Урал” йәштәр мәҙәниәт үҙәге эшләп килә. Көндөҙ унда балалар өсөн саралар ойоштморола, кинофильмдар күрһәтелә, кистәрен йәштәргә дискотека үткәрелә. Ҡыҙҙар, егеттәр башҡорт көйҙәренә лә бейей, йырлай. Ҡасабала мәсет һалдырған өсөн дә оло-лар Риф Шәрифрахман улына рәхмәт уҡый, уға эшендә ҙур уңыштар һәм сәләмәтлек теләй: ”Ҡылған яҡшылыҡтары, игелектәре өсөн сауап алып, Аллаһы тәғәлә рәхмәте булып үҙенә ҡайтыр”, — тиҙәр.

## Ишембайҙа

Ишембай төйәгенең Шиҙе йылғаһы буйындағы Һайран ауылында ты-уып үҫкән Риф Шәрифрахман улы, ифрат та йүнсел эшҡыуар, өс йыл элек йәнтөйәгендә лә ауыл хужалығын күтәрергә, хәлдән, көс-ҡеүәттән килгәнсә ырыуҙаштарына ярҙам күрһәтергә ҡарар итә, крәҫтиән-фермер хужалығын ойоштора. Ошо хужалыҡтың эшмәкәрлеге менән танышыр-ға тип Ишембайға сәфәр сыҡтыҡ. Етенсе тойғо ояныуҙанмы, күңел тар-тыуҙанмы, юл ыңғайы Торатауға боролоп инеп, тәбиғәт ҡомартҡыһы, айырым һаҡланыусы Туғарһалған күле мөхитенә бағып дарманландыҡ.

Биксән ауылына етмәҫ элек ”Хәйерле юл!” тип яҙып ҡуйылған сиктә туҡтаныҡ. ”Ошо урындан Иҫәновтың крәҫтиән-фермер хужалығы би-ләмәһе башлана, — тине Риф Шәрифрахман улы алға бағып. — Ана, Бикмәш, Тирмән тауы, Ҡыҙҙар тауы, Йылан түбәһе, уларҙың буйын-дағы беҙҙең ҡырҙар. Ошо ҡырҙарҙа мул иген үҫһен, был ерҙә әүәлгесә мал үрсеһен, бәрәкәт артһын, ҡәрҙәштәребеҙ ҡот табып йәшәһен өсөн тырышабыҙ”. Өфөлә ғүмер үтһә лә, тыуған ер — яҡын, тыуған йорт — алтын икән шул, ул — ҡанда, йәндә.

Иҫәновтың крәҫтиән-фермер хужалығы идараһы әүәлге ”Коммунар” ауыл производство кооперативы конторaһында урынлашҡан. Хужаның урынбаҫары, агроном Ғабдулхай Сәғитов беҙҙе хужалыҡ менән таныш-тырҙы. Уға Биксән, Һайран, Арлар, Ҡарлар ауылдары ҡарай. Сәсеү-лектәр 850 гектар майҙанды биләй. Баҫыуҙарҙа бойҙай, һоло, көнба-ғыш, үлән үҫтерелә. Район фондына йөҙ тонна иген тапшырыу бурысы



ҡуйылған. Фермаларҙа 300 баш һыйыр малы, йәнә йөҙләп ат аҫрай-ҙар. Хужалыҡтың 20 тракторы, 8 йөк машинаһы, 4 комбайны, ма-шина-трактор станцияһы, заправкаһы, ыр-ҙын табағы, тирмәне, пилорамаһы, ашханаһы һәм башҡа ҡоролмала-ры, кәрәк-яраҡтары бар. 67 кеше эш, кәсеп-шөғөл менән мәшғүл.

Әлбиттә, заманыбыҙ ғәрәсәтенән, ҡойононан, зил-зиләһенән һуң донъяны ипкә килтереү, яңынан ҡороу, ырыҫланыу еңелдән түгел. Элекке ”Коммунар” ауыл производство кооперативының тәҙрәһеҙ, ишекһеҙ, емерек мал ҡуралары, боҙолған, иҫкергән техникаһы, түләнмәгән түләүҙәре (11 миллион һум бурысы, 700 мең һум хеҙмәт хаҡы) ифрат ауыр ”мираҫ”, муйынды һығыр боғалаҡ булып ҡалған. Шуға ҡарамаҫтан, Иҫәновтың крәҫтиән-фермер хужалығы көс-ҡеүәт туплай, мохтажлыҡҡа дусарҙарҙы ҡотҡарып, хөр тормошҡа әйҙәй.

— Ауыл халҡы әүәл колхоздан, совхоздан ниҙер һорап өйрәнгән һымаҡ, ғәҙәт буйынса, крәҫтиән-фермер хужалығынан да ярҙам өмөт итеп килә. Баш тартмайбыҙ, — тип һөйләй Ғабдулхай Сәғитов. — Бойҙай, һоло, аҙыҡ-түлек яҙҙыртып, таҡта, штакетник быстыртып бирәбеҙ. Машина-трактор оҫтаханаһында шәхси техника ремонтлайҙар, электрод, кислород еткереп булмай. Риф ағай бай, тиҙәр ҙә киләләр. Ул үҙе лә ауыл халҡына булышырға күрһәтмә биреп ҡуйған. Ауырыуҙарҙы дауаханаға алып барабыҙ, ветерандарға ярҙам итәбеҙ, мәрхүмдәрҙе һуңғы юлға оҙатабыҙ... Бөтәһе лә беҙҙең өҫтә. Ҡәҙер белегеҙ, битһеҙләнмәгеҙ, тим. Әҙәп белмәй, һөмһөҙләнеүселәр ҙә бар. Эш тигәндә юҡ дарман, аш тигәндә йәнфарман — шундайҙар күңелде ҡыра. Ә эшһөйәргә бер ни йәл түгел.

Крәҫтиән-фермер хужалығын ойоштороусы Риф Шәрифрахман улынан ярҙам һорап килеүҙәренә үҙебеҙ шаһит булдыҡ. Һикһәнгә еткән бабайҙың ҡураһы, мал-тыуары янған. Ул донъяһын тергеҙергә булышыуҙы үтенә. Үҙенең бала-сағаһы ла бар, тиҙәр. Мәгәр ул Иҫәновҡа килгән. Миңлеғәле Килдеғужин ҡоҙаһын ерләргә аҡса һорай. Риф Шәрифрахман улы кеҫәһенән биш йөҙ һум сығарҙы ла бирҙе. Әйтеүҙәренсә, башҡа фермер хужалыҡтары социаль мәсьәләләрҙе хәл итеп бармай, ғәмәлдә үҙ көнөн генә ҡайғырта.

— Әүәлге күмәк хужалыҡ менән сағыштырғанда, Иҫәновтың крәҫтиән-фермер хужалығында көнитмеш мәсьәләләрен хәл итеү нисек? — Баш бухгалтер Гөлсинә Мырҙағәлинаға ошо һорауҙы бирҙем.

— Колхоз ваҡытында айырыуса финанс мәсьәләһе ауыр булды. Кредиттан баш сыҡманы, — тине ул. — Хәҙер тотҡарлыҡ, ҡыйынлыҡ юҡ. Риф ағай тейешле сумманы күсертә, йә үҙе алып килә. Мал ҡуралары яңыртылды, ғүмерҙә күрмәгән ҡорамалдар алынды. Яңы урында өс йөҙ мең һум сығым менән йәйге лагерь төҙөлдө. Әле байтаҡ сенаж һалынған, бесән өйөлгән. Крәҫтиән-фермер хужалығы ойошторолоуға ике йыл ғына үтеүгә ҡарамаҫтан, һөҙөмтәләр һәйбәт. Ер эшкәртелә, иген игелә, мал ишәйә. Һөт Өфө һөт комбинатының Петровскиҙағы филиалына тапшырыла, баҙарҙа ла һатыла, ат итенә хатта заказ бирәләр. Ауыл тулы ҡанлы тормош менән йәшәй. Эшләгән халыҡ менән ваҡытында иҫәпләшәбеҙ. Ә бит күрше хужалыҡтарҙа бигүк эш хаҡы ала алмайҙар, беҙҙән көнләшәләр. Эш хаҡы иҫәбенә фураж, бесән, һалам, башҡа кәрәк-яраҡ биреп торабыҙ. Пенсионерҙар иһә ҡулаҡсаға ала. Башҡа ауылдарҙағы һымаҡ, беҙҙә эскелек тә көслө түгел. Ғөмүмән, халыҡ Риф Иҫәновтың крәҫтиән-фермер хужа-

лығына ыңғай ҡарашта. Әлбиттә, киреләр, аяҡ салырға маташыусылар ҙа бар, ләкин ундайҙар аҙ.

Бишағас буйындағы ике йөҙ илле гектар ерҙә көнбағыш сапҡан, уны силосҡа һалған механизаторҙар менән осрашып һөйләшеп торҙоҡ. Рөстәм Килдеғужин мәктәпте тамамлағас, инде ике йыл фермер хужалығында эшләй. Шофер Ишмырҙа Насретдинов йәнтөйәгендә шөғөл булыуҙан ҡәнәғәт: "Колхоз бөткәс, табыр-таяныр урын ҡалмағайны. Аллаға шөкөр, хәҙер эш бар. Башҡа баш төртөр ер юҡ. Аҡса, аҙыҡ-түлек алып торабыҙ — шул шатлыҡ. Риф беҙҙең яҡташ, ерҙәш, ырыуҙаш, тик яҡшылыҡ ҡыла. Сит-яттан быны өмөт итеп булмай.

Механизатор Миңлегәрәй Иҫәновтың һөйләүенсә иһә, крәҫтиән-фермер хужалығында ергә, хеҙмәткә мөнәсәбәт хужаларсараҡ, көнитмеш арыуыраҡ, эш хаҡы яҡшыраҡ. Хәл-торош, йәшәйеш ыңғайлана. Әле көҙөн ике йөҙ гектар ергә арыш та сәселәсәк. Риф Шәрифрахман улының ташландыҡ ерҙәрҙе тергеҙергә ниәтләүе лә хуп. Хужалыҡты һауыҡтырыуға, ҡеүәтләндереүгә управляющий Хызыр Мусин тос өлөш индерә. Хеҙмәтенә күрә хөрмәте. Хаҡлы ялға киткәндә Риф ағаһы уны "Ока" автомобиле менән бүләкләргә вәғәҙә итте. Атай-олатайҙар төйәк иткән изге ер бәрәкәте өсөн Иҫәновтың крәҫтиән-фермер хужалығына Һайран ауылы хакимиәте башлығы Дамир Ямалетдиновтың булышлығы ла бик хуш. Бит берҙәм эш иткәндә генә бәрәкәт күберәк.

Йәшерен-батырыны юҡ, тормошобоҙ үҙгәрешкә дусар йылдарҙа бәғзе ҡәрҙәштәребеҙ тик ятырға күнегеп киткән. Матбуғатта ҡәләмдәштәр, ауылда йәштәргә шөғөл юҡ, тип яҙһа ла, Иҫәновтың крәҫтиән-фермер хужалығында һөнәрмәндәргә эш етерлек, белгестәр, комбайнсылар кәрәк. Уларҙы эҙләргә, эшлә, тип өгөтләргә тура килә. Беҙҙең алда эшҡыуар берәүҙе ырҙын табағына ҡарауылға сығырға өгөтләне. Ыҡҡа килмәне теге, уйлайым әле, тип ҡайтып китте. Ураҡҡа бәйле үткәрелгән йыйылышта Риф Шәрифрахман улы: "Һеҙ минең өсөн түгел, үҙегеҙ өсөн эшләйһегеҙ, — тине. — Мин иһә ғәмәлдә тыуған еребеҙҙең бәҫен, башҡортомдоң, нәҫелдәштәремдең ҡотон һаҡлау өсөн тырышам. Бынан бер нәмә лә алып китмәйем, барыһы ла ошонда, һеҙгә ҡала. Иртә торһаң, ит бешә, һуңға ҡалһаң, бит бешә тигәндәй, урып-йыйыу мәлендә йоҡлап ятмау, эшкә иртә сығыу, әүҙем эшләү зарур. Ер хәстәрлек ярата, ул — тыуҙырыусы, унда — икмәк, бар ризыҡ, көс-ҡөҙрәт. Ере барҙың ғына еме, йүне бар. Һәммәбеҙ яҡшы белә: күктән көткән ерҙә табыла. Шуға ла ереккән еребеҙҙә үҙебеҙ хужа булайыҡ! Туйынған да — ер, һыйынған да ер икәнен онотмайыҡ".

Тап шулай, ерһеҙ крәҫтиән тамырһыҙ ағас кеүек, ҡорой. Ҡош күкһеҙ, балыҡ һыуһыҙ йәшәй алмаған кеүек, кеше ерһеҙ йәшәй алмай.

Йәнтөйәккә тағы ла яҡыныраҡ булыу, уның йәмен, ҡотон арттырыу өсөн Риф Иҫәнов улы Рәфис менән атай-олатай йортон тергеҙгән, бик тә күркәм оло өй, бәләкәй өй күтәргән, мунса һалған. Баҡсала Шәрифрахман уҙаман ултыртҡан алма ла үҫә, егерме биш оя бал ҡорто ла гөжләй. Уларҙы Риф Иҫәновтың ағаһы Ғаяз Шәрифрахман улы ҡарай.

Алла бирһә, күстәрҙе үрсетеп, умарталарҙы йөҙгә еткермәкселәр. Һайранда Иҫәновтар нәҫеле иҫән, йәнтөйәктә тамырҙы киңерәк йәйә, тәрәнерәк ебәрә, тормош ағасын, шәжәрә ағасын йәшәртә.



Риф Шәрифрахман улы йорттары йәнәшендә ауылдаштары өсөн мәсет һалдыра. Урыны аныҡ билдәләнеп, доға уҡылған, әруахтар рухына ҡорбан салынған. Тынғы белмәҫ эшҡыуар, ғәйри ир-егет ҡәрҙәштәренең йөрәгендә арҙаҡлы ерҙәштәре Әхмәтзәки Вәлиди рухы балҡыуын теләй, шул изге ниәттән үҙе лә ут булып яна, башҡаларға ла осҡон, ялҡын өҫтәй. Ул беҙҙе Әхмәтзәки йөрөгән ерҙәргә, йәмле Шиҙе буйына, данлы, шөһрәтле Көҙән ауылына алып барҙы. Арҙаҡлы яҡташыбыҙҙың йәнтөйәгенә аяҡ баҫып, халҡыбыҙға аманат иткән хеҙмәттәрен, нәсихәттәрен хәтерләп, рухына баш эйеп, Башҡортостаныбыҙға ҡот-ырыҫ, именлек теләнек. Риф Шәрифрахман улы әйткәнсә, беҙ уның вариҫтары, васыяттарын бойомға ашырыусылар. Унан ифрат та фәһемле хәтирәләр, хеҙмәттәр ҡалған һымаҡ, беҙҙән дә ҡәрҙәштәребеҙ йәшәрерлек эштәр ҡалырға тейеш.

— Хәҙерге заманда күптәрҙең хәстәре — фәҡәт үҙ донъяһы, ғаиләһе, бәғзеләрҙең — тамаҡ, кейем, хәмер, байрам... Ә бит халыҡ әйтмешләй, ашар өсөн йәшәмә, йәшәр өсөн аша. Фәҡәт үҙ тамағың, даирәң менән генә донъя бөтәймәй. Шуға ла мин йорт-ил хәстәре менән дә мәшғүлмен, — тине беҙгә эшҡыуар бик мәғәнәле итеп.

Оло йәшкә етеп барыуға ҡарамаҫтан, йәштәр тотонмағанға тотонғанғамы, һаман да дәрт-дарманы ташып торғанғамы, йыш ҡына Риф Шәрифрахман улынан ғәжәпһенеп һорайҙар:

— Һеҙгә нисә йәш?

— Йөҙ егерме! — ти ул етди ҡиәфәттә.

— Кит, булмаҫты, — тиҙәр аптырап.

— Уйлап ҡарағыҙ, бер үҙемдә йөҙ—ике йөҙ, бәлки, күберәк тә кешенең хәстәре. Шуға ла икеләтә, өсләтә оҙон ғүмер йәшәйем һымаҡ. Халҡыбыҙҙың арҙаҡлы улдарының ғәжәп, хайран итерлек эштәре ҡала. Мин дә ҡәрҙәштәрем хәтеренә уйылыр эштәр башҡарырға ашҡынам. Иң мөһиме: үрнәк тә, кеше күрмәк тә булһаҡ, беҙгә оҡшаған йәштәр ишәйер, донъябыҙ бөтәйер, тормошобоҙ йәмләнер.

Хужалыҡтарҙа йөрөгәндә: ”Риф Иҫәнов тәбиғәте менән оптимист!” — тигәйнеләр. Тап шулай: асылы, дәрт-дарманы, хайран эштәре менән ҡәрҙәштәребеҙгә өлгө дан шәхес.